# Муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы «3-сө лицей»ының башҡорт теле уҡытыусыһы

# Йосопова Рәүзинә Йомабай ҡыҙының

# сығышы

# Уҡыусыларҙың башҡортса телмәр компетентлығын формалаштырыуҙа тыңлап аңларға өйрәтеү юлдары

# Һөйләргә һөйләп,тыңларға тыңлап,уҡырға уҡып ҡына өйрәнергә була

**Маҡсат- уҡыусыларҙы башҡорт телендә ишеткәнде, һөйләгәнде, уҡығанды аңлау күнекмәләре булдырыу. Башҡортса аралышырға, башҡорт телен өйҙә, йәмғиәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү**

***Объект- тыңлап аңларға өйрәтеү процесы***

***Предмет- тыңлап аңларға өйрәтеү алымдары***

Дидактик принциптар;еңелдән ауырға,күргәҙмәлелек, фәннилек, материалды системалы аңлы үҙләштереү, уҡыусыларҙың щәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу, теорияны практика менән бәйләп уҡытыу

**Методик принциптар: коммуникатив нигеҙҙә өйрәнеү; сит телде уҡыусыларҙың туған теленә таянып өйрәтеү; интеграция, дифференцация, функционаллек.**

- **Башҡорт телендә тыңлап аңларға өйрәтеү( аудирование)**
- **Башҡортса аралашырға (общение) өйрәтеү.**
- **Башҡорт телендә дөрөҫ, тасуири уҡырға өйрәтеү.**
- **Төрлө типтағы текстарҙы башҡортса яҙырға өйрәтеү.**

## 1.Тексты тыңлағыҙ, географик атамаларҙы, яңғыҙлыҡ исемдәрҙе хәтерҙә ҡалдырырға

## тырышығыҙ.

**Торатау.**

**Башҡортостандың Стәрлетамаҡ һәм Ишембай районында урынлашҡан дүрт айырым тау- шихандарҙың (Шаһтау, Ҡуштау, Йөрәктау) иң бейеге Торатау. Торатау алыҫтан бик матур күренә. Изге тау тип һаналған урын шулай уҡ Юрматы ырыуы башҡорттарының йыйын урыны булған.**

**Текстағы ҡабатланған һүҙҙе ишетеү менән берәй билдә күрһәтергә, әйтәйек, сәпәкәйләргә. Мәҫәлән, был текста *хуш* һүҙе ниндәй варианта осраһа ла ишетеп сәпәкәйләргә кәрәк.**

**Хуш, йәшелле йәй,**
**Йәмле лагерь, хуш,**
**Хуш, хәтфә ҡырҙар,**
**Хуш, ал ҡояш - дуҫ!**

**Уҡыусыларҙың йәйге ялдары тураһындағы 4 тексты тыңла һәм каникулдарҙың ҡайҙа үтеүен аңла һәм**

**таблицала билдәлә.**

1. Быйыл йәйге каникулды бик күңелле үткәрҙем. Ҡалала йәшәгән Айгөл апайым мине  ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Беҙ уның менән ҡала урамдары буйлап йөрөнөк, циркка барҙыҡ. Кинотеатрҙа балалар өсөн кинолар ҡараныҡ. Апайым миңә батырҙарға арналған һәйкәл күрһәтте. Ҡалалағы ял миңә бик оҡшаны.

2. Йәйге каникулдар башланғас та, әсәйем мине өләсәйемдәргә ауылға алып ҡайтты. Мин унда ике ай ял иттем. Дуҫтарым менән урманға барҙыҡ, еләк, бәшмәк, матур-матур сәскәләр йыйҙыҡ. Ауылда мин өләсәйемә лә ярҙам иттем. Беҙ уның менән бергәләп йәшелсәләргә  һыу һиптек, сүп утаныҡ. Йәйге ялым бик күңелле үтте.

3. Быйыл йәй көнө атайым менән диңгеҙ ярына ял итергә барҙыҡ. Беҙ унда көнө буйы яр ситендә ҡыҙындыҡ, диңгеҙҙә йөҙҙөк. Кисен ҙур-ҙур тулҡындарға ҡарап һоҡландыҡ. Диңгеҙ буйында яңы дуҫтар таптым. Улар менән интернет селтәре аша хатлашырға һүҙ ҡуйышып айырылыштыҡ. Минең был ялым бик күңелле һәм файҙалы үтте.

4. Быйыл йәй мин лагерҙа ял итергә булдым. Уның һәр бер көнө матур хәтирәләр ҡалдырҙы. Отряд менән күлдә уҙышып йөҙөүҙәр тиһеңме, төрлө-төрлө йыр, шиғыр конкурстары тиһеңме, киске костер янында уйын-көлкө, бейеүҙәр тиһеңме - барыһы ла бик күңелле һәм онотолмаҫлыҡ булды. Дуҫтарым менән икенсе йылға осрашырға һүҙ ҡуйышып айырылыштыҡ.

## Айгөл менән Айнурҙың һөйләшкәндәрен тыңла

## һәм тура килгән һүрәттәрҙе билдәлә

-Һаумы, Айнур!

- Сәләм, Айгөл!

- Айнур, ә һин беләһеңме, бөгөн беҙҙең мәктәпкә осрашыуға Ғәфүр ағайым киләсәк.

- Айнур, ә ул нимә тураһында һөйләйәсәк?

-Ағайым армия сафтарында хеҙмәт иткәндә ҙур батырлыҡ күрһәткән, хатта уның ордены ла бар. Шул турала һөйләйәсәк.

-Ярай, һис шикһеҙ барасаҡмын. Йә, ярай, осрашҡанға тиклем, һау бул

- Һау бул





# 5а класы уҡыусыларының белем кимәле




ДИПЛОМ
ученической славы
НАГРАЖДАЕТСЯ
Капралова Анастасия,
обучающийся (-аяся) 5 класса МАОУ «Лицей №3»
победитель муниципального этапа
Всероссийской олимпиады школьников по башкирскому
языку
Дорогой друг!
Покоряй новые вершины знаний, собирай
по крупицам то мудрое, вечное, что накопило человечество,
и никогда не останавливайся на достигнутом.
Начальник отдела
образования
М.В. Григорьев
г. Стерлитамак